Мәсетле районы Оло Ыҡтамаҡ Башҡорт гимназияһы филиалы Әбдрәхим төп дөйөм белем биреү мәктәбе

# 14 декабрь - башҡорт теле көнө




Халҡым теле миңә – хаҡлыҡ теле,
Унан башҡа минең илем юҡ;
Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына теле юҡ!
Рәми Ғарипов,
Башҡортостандың халыҡ шағиры
БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
МӘҘӘНИӘТ МИНИСТРЛЫҒЫ
Башҡорт
теле
көнө

# Тыуған тел – милләттең ырыҫы, кото һәм күрке!

*Таңсулпан Ғарипова,*
*Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы*



БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
МӘҘӘНИӘТ МИНИСТРЛЫҒЫ

МИЛЛИ ӘҘӘБИӘТ
МУЗЕЙЫ
НАЦИОНАЛЬНЫЙ
ЛИТЕРАТУРНЫЙ
МУЗЕЙ

Башҡорт
теле
көнө

*Инәм теле – иман телем,*
*Әгәр һине һағынмаһам,*
*Көн дә һиңә табынмаһам,*
*Телдәремдән яҙыр инем.*

*Мостай Кәрим,*
*Башҡортостандың халыҡ шағиры*



БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
МӘҘӘНИӘТ МИНИСТРЛЫҒЫ

МИЛЛИ ӘҘӘБИӘТ МУЗЕЙЫ
НАЦИОНАЛЬНЫЙ ЛИТЕРАТУРНЫЙ МУЗЕЙ

Башҡорт теле көнө



*Аттың нимен маҡтайһың-*
*Бәйгеләрҙә сапмаған;*
*Баланың нимен маҡтайһың-*
*Атаның телен алмаған.*

*Мифтахетдин Аҡмулла, шағир-мәғрифәтсе*

БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
МӘҘӘНИӘТ МИНИСТРЛЫҒЫ

МИЛЛИ ӘҘӘБИӘТ МУЗЕЙЫ

НАЦИОНАЛЬНЫЙ ЛИТЕРАТУРНЫЙ МУЗЕЙ

Башҡорт теле көнө


Телен һаҡлаған
халыҡ – илен яҡлаған халыҡ.
Рамаҙан Шәғәлиев, шағир
БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
МӘҘӘНИӘТ МИНИСТРЛЫҒЫ
МУЗЕЙЫ
МУЗЕЙ
Башҡорт
теле
көнө



*Башҡорт балаһы мин,*
*Ер хәтерендә*
*Мең йыл уйылып барған эҙем бар,*
*Быуындарға ялғап быуындарҙы,*
*Илде тотҡан телем, һүҙем бар!*

*Рауил Бикбаев,*
*Башҡортостандың халыҡ шағиры*

БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
МӘҘӘНИӘТ МИНИСТРЛЫҒЫ

МИЛЛИ ӘҘӘБИӘТ
МУЗЕЙЫ

НАЦИОНАЛЬНЫЙ
ЛИТЕРАТУРНЫЙ
МУЗЕЙ

Башҡорт
теле
көнө



*Кешеләрҙе ерҙә тел йөрөтә,*
*Тылсым аҫҡысындай тел үҙе…*
*Йәнебеҙгә, тәнебеҙгә дауа –*
*Телебеҙҙең тере диңгеҙе.*

*Рәшит Шәкүр, шағир, тел белгесе*

БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
МӘҘӘНИӘТ МИНИСТРЛЫҒЫ

МИЛЛИ ӘҘӘБИӘТ
МУЗЕЙЫ

НАЦИОНАЛЬНЫЙ
ЛИТЕРАТУРНЫЙ
МУЗЕЙ

Башҡорт
теле
көнө


Туған тел – ҡан туғандарҙың
бер-береһен күҙгә күренмәҫ нурҙар менән
тоташтырыусы күңел тартымы.
Туған тел – ул ҡан хәтерен уятыусы
төп шарт. Беҙ үткәндәребеҙгә фәҡәт
туған тел аша ғына ҡайта алабыҙ.
Мәрйәм Буракаева, яҙыусы
БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
МӘҘӘНИӘТ МИНИСТРЛЫҒЫ
МУЗЕЙЫ
МУЗЕЙ
Башҡорт
теле
көнө



*Ерҙә кеше һөйәгенән*
*Убалар үҫкән…*
*Тел – тере шишмә – үлмәгән,*
*Бөгөнгә еткән !*

*Баязит Бикбай, шағир*

БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
МӘҘӘНИӘТ МИНИСТРЛЫҒЫ

МУЗЕЙЫ

МУЗЕЙ

Башҡорт
теле
көнө

Ыласын ҡошмо әллә туған телем –
Урал ҡаяларын төйәк иткән?
Ҡарурманмы әллә туған телем –
Ел ҡағылған һайын сыңлап киткән?

*Тамара Ғәниева, Башҡортостандың халыҡ шағиры*



БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ МӘҘӘНИӘТ МИНИСТРЛЫҒЫ

Башҡорт теле көнө


Һүҙ – ул телмәрҙең нигеҙ ташы. Үҙ халҡына һәм туған телгә булған мөхәббәт бер-береһенә айырылғыһыҙ бәйләнгән. Халыҡтың йәнле һөйләү теле – ул әҙәби телдең шишмәһе. Әсә теле – мәктәптә белем һәм тәрбиә ҡоралы.
Жәлил Кейекбаев, тел белгесе, яҙыусы
БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
МӘҘӘНИӘТ МИНИСТРЛЫҒЫ
НАЦИОНАЛЬНЫЙ ЛИТЕРАТУРНЫЙ
Башҡорт теле көнө


Туған телем! Туған моңдар! Һеҙҙең аша
Зиһенемә быуаттарҙың заңы тоташа.
Хәсән Назар,
Башҡортостандың халыҡ шағиры
БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
МӘҘӘНИӘТ МИНИСТРЛЫҒЫ
МУЗЕЙЫ
НАЦИОНАЛЬНЫЙ ЛИТЕРАТУРНЫЙ МУЗЕЙ
Башҡорт теле көнө


Яҙмышыбыҙ – тел яҙмышы,
Беләм уның хакында:
Әгәр телем йәшәй икән,
Йәшәйәсәк халкым да.
Ирек Кинйәбулатов, шағир
БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
МӘҘӘНИӘТ МИНИСТРЛЫҒЫ
МУЗЕЙЫ
МУЗЕЙ
Башҡорт
теле
көнө


Акһакалдар акылындай хаклык телем,
Сабыйҙарҙың сафлығындай намыҫ телем,
Атам теле, әсәм теле, сәсән теле –
Уралымдай йәшәй мәңге, башкорт теле!
Ҡ. Аралбаев
14 декабрь
Башҡорт теле көнө менән


14 декабрь
Башҡорт теле көнө
Күңелемдең һүнмәҫ нуры һин,
Мәңге йырланасаҡ йырым һин,
Моңло – йырлы туған телем һин.
К. Кинйәбулатова


Әсәм теле минә – сәсән теле,
Унан башҡа минең халҡым юҡ,
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ!
Р. Ғарипов


«14 ДЕКАБРЬ — БАШҠОРТ ТЕЛЕ КӨНӨ»
шоңҡар
Мин халҡымдың сәскә күңеленән,
Бал ҡортондай, һыйыы йыямын,
Йыямын да – йәнле һыйыларҙан
Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.

Шуға ла мин беләм тел ҡәҙерен:
Бер телдән дә телем кәм түгел –
Көслө лә ул, бай ҙа, яғымлы ла,
Кәм күрер уны тик кәм күңел!..

Халҡым теле миңә – хаҡлыҡ теле, -
Унан башҡа минең илем юҡ;
Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына теле юҡ!

Әсәм теле миңә – сәсән теле,
Унан башҡа минең халҡым юҡ;
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ!